*Төҙөүсеһе – ф.ф.к., доцент Янбаев И.К.*

**Юғары уҡыу йорттары студенттары өсөн**
**“Урал батыр” эпосы буйынса тест һорауҙары**

*(Иҫкәрмә: һорауҙарҙың яуаптары 4 вариантлы, шуларҙың берәүһе генә дөрөҫ.*
*Ул “йондоҙсоҡ” /*/ менән күрһәтелде)*

1. “Урал батыр” эпосы ҡасан, кем тарафынан, ҡайҙа һәм кемдән яҙып алынған?
а) Байыҡ Айҙар сәсәндән 1740 йылда хәҙерге Салауат районы Мәхмүт ауылында яҙып алынған. Кем тарафынан ҡағыҙға теркәлеүе билдәһеҙ.
б*) 1910 йылда Мөхәммәтша Буранғолов тарафынан хәҙерге Баймаҡ районы Иҙрис ауылы ҡурайсыһы Ғәбит сәсәндән һәм Бәләкәй Этҡол ауылы ҡурайсыһы Хәмит сәсәндән
в) 1850 йылда Сәйет Исмәғилев тарафынан хәҙерге Әбйәлил районы Яңы Балапан ауылында Ишмөхәмәт сәсәндән яҙып алынған
г) 1910 йылда Мөхәммәтша Буранғолов тарафынан хәҙерге Баймаҡ районы Бәләкәй Этҡол ауылы ҡурайсыһы Хәмит сәсәндән

2. Башҡорт ғалимы Салауат Ғәлләмов фекеренсә, “Урал батыр” эпосы сама менән күпме йылдар элек барлыҡҡа килгән?
а) 500 йыл элек
б) 2000 йыл элек
в*) 4000 йыл элек
г) 3000 йыл элек

3. “Урал батыр” эпосының тексы тәү тапҡыр нисәнсе йылда, ниндәй баҫмала донъя күрә?
а) “Шура” журналы, 1910
б) “Октябрь” журналы, 1934
*в) “Ағиҙел” журналы, 1968
г) “Ватандаш” журналы, 2010

4. “Урал батыр” эпосы йөкмәткеһе менән ниндәй осорҙо сағылдырған әҫәр?
а) феодализмдың башланғыс осорон сағылдырған эпос
б*) ырыу йәмғиәтенең емерелеү осорон сағылдырған эпос
в) феодализмдың үҫеү осорон сағылдырған эпос
г) феодализмдың һуңғы осорона ҡараған эпос

5. “Урал батыр” эпосының йөкмәткеһенән сығып, боронғо башҡорттарҙың һунарға ниндәй хайуан йәки ҡоштарҙы йәлеп итеүен әйтегеҙ.

а) арыҫлан менән юлбарыҫ
*б) арыҫлан, эт, суртан, шоңҡар, яғылбай
в) ҡырағай ат йәки тарпан, эт менән арыҫлан
г) арыҫлан

6. Йәнбирҙе ҡарттың улдарына әйткән һүҙҙәрен иҫкә төшөрөп, боронғо башҡорттарҙың балаларҙы һыбай өйрәтергә ниндәй хайуанды файҙаланғанын әйтегеҙ.

Мин ни бирһәм, ашағыҙ,
Мин ҡушҡанды эшләгеҙ;
Күнегергә һыбайға –
Ана, ... менегеҙ.

а) арыҫлан
*б) болан
в) үгеҙ
г) тарпан

7. Эпостан аңлашылыуынса, һыуһын өсөн эсемлекте ҡандан әҙерләгәндәр. Ҡанды йәки бүтән эсемлекте ниндәй һауытта һаҡлағандар? Йәғни, шул һауыттың атамаһы нисек?
а) ҡаҙан
б) ҡоштабаҡ
в*) ҡабырсаҡ
г) көбө

8. Ҡатил батшаның ҡыҙы, йола буйынса йыл һайын уҙғарылған сираттағы йыйында үҙенә егет һайлаған саҡта, Уралды оҡшатыуын нисек белдерә?
а) уға тылсымлы таяҡ бүләк итә
б*) алма һона
в) сигелгән ҡулъяулығын тоттора
г) бармағындағы йөҙөгөн бүләк итә

9. Эпоста, халыҡ димләүе буйынса, Урал батырҙың туй яһап, ҡыҙ алыуы тураһында һөйләнелә. Уға кәләш булған ҡыҙ йәки ҡыҙҙарҙың кемлеген әйтегеҙ.
а*) Ҡатил батша ҡыҙы, Гөлөстан, Һомай
б) Һомай
в) Ҡатил батша ҡыҙы
г) Гөлөстан менән Һомай

10. Күк һәм ҡоштар батшаһы Самрауҙың ҡатыны йәки ҡатындары кем?
а) Ай
б) Ҡояш

*в) Ҡояш менән Ай
г) Һомай менән Айһылыу

11. “Урал батыр” әҫәрендә башҡорттарҙың боронғо космогоник ҡараштарын сағылдырған эпизодтар бар. Әзрәҡәнең һүҙҙәрен иҫкә төшөрөп, уның тарафынан күккә, Самрау ҡош-батшаның Аҡбуҙатын урлап алыу өсөн, кемдәрҙең сапҡын ебәрелеүен әйтегеҙ.
а) Ун ике башлы дейеүе ебәрелә
б) Шүлгән менән Зәрҡүм
в*) ете дейеү ебәрелә
г) алты, туғыҙ һәм ун ике башлы өс дейеү

12. Аҙаҡ Урал ҡулына барып юлығасаҡ серле таяҡтың эйәһе кем?

Шул батшаның ҡулында
Яуға ҡаршы ут булыр,
Теләгәндә – һыу булыр,
Ел-дауылдар ҡуптарыр
Бер хикмәтле таяҡ бар.

а*) Ҡәһҡәһә батша
б) Ҡатил батша
в) Самрау батша
г) Әзрәҡә батша

13. Түбәндәге текста кемдең портреты тасуирланған?

Унең усма шәлкемдәй,
Енсегене ҡапларҙай,
Кәйтән менән биҙәлгән
Сәс толомо һалынған;
Оҙон керпеге үтә
Ҡара күҙе текәлгән;
Уйнап торған ҡыйғас ҡаш
Күҙ өҫтөндә йылмайған;
Тертәйешкән ҡалҡыу түш
Күҙ алдында тулҡынған;
Бал ҡортондай нәҙек бил
Борғоланып уйнаған;
Гүйә, күптәнге танышы,
Көмөштәй саф тауышлы...

*а) Һомай
б) Айһылыу
в) Ҡатил батшаның ҡыҙы
г) Гөлөстан

14. Һарысайҙың кемдең аты булыуын әйтегеҙ.

а) Һарысай – Ҡатил һарайында бикле торған ат
б) Һарысай – Гөлдөрсөндөң аты
в*) Һарысай – Айһылыуҙың аты
г) Эпоста Аҡбуҙаттан башҡа ат телгә алынмай

15. Эпоста, Урал батырҙан башҡа, дүрт йылғаға атама биргән дүрт батырҙың эш-ҡылыҡтары ла тасуирлана.Уларҙың ҡайһыһы йәки ҡайһылары Шүлгәндең улы?
а) Иҙел менән Нөгөш
б*) Һаҡмар батыр
в) Яйыҡ батыр
г) Улар барыһы ла Урал батырҙың улдары

16. Эпоста, Зәрҡүм менән Шүлгән кеүек үк, Һомай менән Айһылыу ҙа һын алмаштырыусан образдар булараҡ кәүҙәләндерелә. Ҡыҙҙарҙың кемеһе ниндәй ҡошҡа йәки бүтән затҡа әүерелә ала?
*а) Һомай – аҡҡош, Айһылыу өйрәк ҡиәфәтендә йөрөй ала
б) Икеһе лә тик аҡҡош һынын алыусан
в) Һомай аҡҡош менән йыланға, Айһылыу толпарға әүерелә ала
г) Һомай – Аҡбуҙат, Айһылыу Һарысай ҡиәфәтенә инә ала

17. “Урал батыр” эпосында Урал-Алтай, Урта Азия, Яҡын Көнсығыш, төрки халыҡтары фольклорында киң таралған, уртаҡ мифик образдар бар. Шулар телгә алынған уңышлыраҡ вариантты күрһәтегеҙ.
а*) Һомай, Самрау, Ҡәһҡәһә, Зәрҡүм, Әзрәҡә
б) аждаһалар, йыландар, арыҫлан, Урал, Айһылыу
в) Урал, Аҡбуҙат, тылсымлы таяҡ, алмас ҡылыс
г) Урал, Шүлгән, Һомай менән Самрау

18. Ғалимдар әйтеүенсә, “Урал батыр” эпосына мифологик нигеҙле булыуы менән оҡшаш, идея-тематик, образдар системаһы һ.б. йәһәтенә бик яҡын, хатта уның дауамы рәүешендә үҫеп сыҡҡан эпостарыбыҙ бар. Уларҙы айырым төркөмләп, үҙенсәлекле “трилогия” тип тә атарға мөмкин. Ниндәй эпостар улар?
а*) “Урал батыр”, “Аҡбуҙат” “Заятүләк менән һыуһылыу”
б) “Урал батыр”, “Аҡбуҙат”
в) “Урал батыр”, “Аҡһаҡ ҡола”, “Ҡара юрға”
г) “Аҡһаҡ ҡола”, “Ҡара юрға”, “Ҡуңыр буға”

19. Бүтән халыҡтарҙың мираҫына ҡараған ҡомартҡыларҙан, башҡорттарҙың “Урал батыр” эпосы (ҡобайыры) һымаҡ уҡ, боронғолоҡто тасуирлаған әҫәрҙәр төркөмөн билдәләгеҙ:

фарсыларҙың “Авеста”һы, ҡырғыҙҙарҙың “Манас”ы, һиндтарҙың “Рамаяна”, “Махабхарата” әҫәрҙәре, шумерҙарҙың “Гильгамеш”ы, уғыҙҙарҙың “Ҡорҡот Ата китабы”, себер төркиҙәренең “Маадай-Кара” эпосы, карел-фин халыҡтарының “Калевала”һы, гректарҙың “Илиада” менән “Одиссеяһы” һ.б.

а) Ҡөрьән, Тәүрат (Тора), Инжил, Библия
б*) фарсыларҙың “Авеста”һы, ҡырғыҙҙарҙың “Манас”ы, һиндтарҙың “Рамаяна”, “Махабхарата” әҫәрҙәре, шумерҙарҙың “Гильгамеш”ы, уғыҙҙарҙың “Ҡорҡот Ата китабы”, себер төркиҙәренең “Маадай-Кара” эпосы
в) Ҡөрьән, Авеста, Нихонги, Кодзики
г) уғыҙҙарҙың “Ҡорҡот Ата китабы”, себер төркиҙәренең “Маадай-Кара” эпосы

20. “Урал батыр” эпосын инглиз теленә тәүләп кем тәржемә иткән?
а) Әлиә Тайсина
б) Ғәзим Шафиҡов
в*) Сәғит Шафиҡов
г) әлегә инглиз теленә тәржемә ителмәгән